

# Беҙ – Стәрлетамак бейеү театры!



Риф Ғәбитов

*Башкорт бейеү сәнғәтенең һуңғы осорҙағы ҙур уңыштарының береһе Стәрлетамак бейеү театрының Нидерланд һәм Бельгия короллектәрендә уҙғарылған ике халык-ара фольклор бейеүҙәре фестивалендә катнашыуы, икеһендә лә алтын миҙалдар һәм беренсе урын дипломдары яулауы булды. Үҙенсәлекле, эҙләнеүсән йәш коллектив хәҙер Көнбайыш Европа кимәленә сығып, Башкортостан бейеү сәнғәтенең яңы формаларын киң даирәләргә күрһәтеү мөмкинлеге алды. Театрҙың етәксеһе, Башкортостандың халык артисы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Риф Ғәбитов ижадын, уның "Еҙ үксә", "Көтөүсе бейеүе", "Коралай", "Бөркөтстан", "Бисура", "Байрак", "Башкорт краковягы", "Ирәндек бөркөттәре", "Замана байығы" бейеүҙәрен беҙ хәҙер, башкорт профессиональ бейеү сәнғәтенә нигеҙ һалыусы Фәйзи Ғәскәровтың "Зарифа", "Ете кыҙ", "Дуҫлык" кеүек бейеүҙәре һымак, халыктыкы, милли мәҙәниәтебеҙ комарткыһы тип иҫәпләүгә өйрәнеп киләбеҙ. Ләкин бейеүҙәрҙең һәр береһенең уларҙы ижад иткән, ҙур кыйынлыктар аша халыкка еткергән, халыктыкы иткән үҙ авторҙары бар. Бөгөн был процесс нисек бара, бейеү сәнғәте ниндәй йүнәлештә үҫешә, ниндәй проблемалар алдында тора — күренекле сәнғәт оҫтаһына ошо һорауҙар менән мөрәжәғәт иттек.*

**Риф Фәтих улы Ғәбитов:**

— Тамамланып барған сезон беҙгә, ысынлап та, ҙур уңыштар килтерҙе. Оло ижади ынтылыштар менән йәшәп, үҙебеҙҙең ҡала, республика халҡын ҡыуандырып, ҡаҙаныштарыбыҙҙы көнбайыш тамашасыһына ла күрһәтеүгә өлгәштек. Шуға һүҙемде Европаға турне сығыштарынан башлар инем.

Нидерландта беҙ ”Опроклдайс—2006” 41-се халыҡ-ара фольклор бейеүҙәре фестивалендә ҡатнаштыҡ. Ул боронғо Вафрум ҡалаһында үтте, бөтә донъянан, биш континенттан 16 коллектив сығыш яһаны. Фестивалдең исеме — ”Опроклдайс” — нидерланд телендә бер генә һүҙ менән әйтелгән ”яҡшы киләсәккә өмөт менән йәшәү” тигән төшөнсәне аңлата. Аралашыу йәһәтенән ҡыйынлыҡтар булманы, тәржемәселәр һәр саҡ эргәлә йөрөнө. Ҡалалағы ғаиләләрҙә, шәхси йорттарҙа йәшәнек. Нидерландтарҙың ифрат ҡунаҡсыл, бөхтә, эшсән, юғары мәҙәниәтле халыҡ икәнен күрҙек. Бик мул тормошта йәшәйҙәр. Ерҙәре әҙ, халыҡ һаны күп, әммә үҙҙәренә етерлек барлыҡ продукцияны етештереп, күршеләренә лә күп сығаралар. Статистикаға ҡарағанда ла, ил тормош кимәле буйынса бөтә донъяла иң алдынғыларҙан иҫәпләнә. Сәнғәткә, фольклорға иғтибар көслө булыуы һиҙелә.

Фестивалдә төрлө ҡитғаларҙан килгән коллективтарҙы күргәс, тәүҙә бик борсолоп та алдыҡ. Бөтәһенең дә хореографияһы, музыкаһы көслө — беҙ уларға тиңләшә алырбыҙмы, тигән уйҙар борсоно. Сығыш яһай башлағайныҡ, беҙгә күберәк ҡул сабалар, иғтибар ҙа арта. ”Башкирия — супер! Колоссалль!” тигән һүҙҙәр ишетәбеҙ. Урамдарға сыҡһаҡ, халыҡ һырып ала, бейеүселәр менән фотоға төшә. Айырыуса үҙҙәренә беҙҙең

*”Опроклдайс—2006” фестивален асыу тантанаһы*



костюмдар, башҡорт бүректәре оҡшай. Өфө, Башҡортостан, Урал тураһында һорашалар. Вафрум фестивалендә еңеүселәрҙе ҡотлағанда бургомистр Герард Рэнкемаа беҙҙе махсус ҡабул итеп: "Башҡортостан бейеүселәре — мин быға тиклем күргәндәрҙән иң ихлас, ябай, асыҡ кешеләр, һеҙҙән боронғо дәүерҙәр энергетикаһы таралып тора", — тип һоҡланыуын белдерҙе.

Автобустарға ултыртып, Бельгияға оҙатҡанда, майҙан тулы халыҡ йыйылды. Беҙ йәшәгән йорт хужалары инде бөтөнләй күҙ йәштәре менән оҙатып ҡалдылар — егеттәребеҙ һәм ҡыҙҙарыбыҙ күңелдәренә бик хуш килде, күрәһең. Һалҡын, ҡырыҫ Төньяҡ диңгеҙе буйында урынлашҡан Нидерланд, Вафрум ҡалаһы беҙҙе шулай йылы ҡабул итте, бөтәбеҙ өсөн дә ул ғүмерлек бер иҫтәлек булып ҡалды. Фестивалдә алтын миҙал һәм беренсе урын яулап, Францияға һәм Испанияға саҡырыу алдыҡ.

Бельгияла Шхоттен ҡалаһында (Антверпен провинцияһы) 48-се халыҡ-ара фольклор бейеүҙәре фестивале сәхнәһендә 8 ил вәкилдәре сығыш яһаны. Шулай уҡ бик юғары кимәлдә ҡабул иттеләр. Беҙ Шхоттен фестивалендә лә алтын миҙал һәм беренсе урын яуланыҡ.

Бельгияла, нидерландтарҙан тыш, французлар менән немецтар ҙа күп йәшәй, халыҡ өс телдә һөйләшә. Мәҙәниәттәрендә лә немец һәм француз йоғонтоһо көслө. Илдә иҡтисад ныҡ үҫешкән. Сәнғәткә, айырыуса театр, эстрадаға, фольклорға иғтибар ҙур.

Фестивалдә ҡатнашыуҙан тыш, беҙ уҡыу йорттарында, пансионаттарҙа, ҡала майҙандарындағы тамашаларҙа, хатта бик яҡшы акустикалы бер боронғо кирхала сығыш яһаныҡ. Репертуарға килгәндә, күберәк башҡорт халыҡ бейеүҙәрен башҡарҙыҡ. Төрлө илдәрҙән килгән коллективтар араһында беҙҙе иң ҡыҙыҡһындырғаны Ирландия бейеүселәре булғандыр. Быныӊ сәбәбен иһә артабан ентекләберәк аңлатырмын.

Фестивалдәрҙә элекке союздаш республикаларҙан Украинаның Львов ҡалаһынан "Горицвет" ансамбле генә ҡатнашты. Ул Киевтағы академик бейеү ансамбленән ҡала иң көслө коллектив. Художество етәксеһе Зенон Колобич: "Инде күп йылдар Башҡортостан бейеү ансамблдәре ижады менән ҡыҙыҡһынам һәм шуны әйтә алам — һеҙҙә сәнғәт иң юғары профессиональ кимәлгә еткерелгән. Һеҙ, ысынлап та, көслөрәк," — тип белдерҙе.

Шхоттен ҡунаҡтарын ҙурлап, салют биреп хушлашты. Беҙҙең Стәрлетамаҡ егеттәре һәм ҡыҙҙары йәнә иғтибар үҙәгендә булды.

Нидерланд һәм Бельгия короллектәрендә уҙғарылған ике ҙур халыҡ-ара фестивалдә алтын миҙалдар һәм еңеүсе дипломы яулауыбыҙҙа коллективтың унда ҡатнашыуын ойоштороу, финанслау йәһәтенән Башҡортостандың мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министры Илдус Ғөбәйҙулла улы Илишев, Стәрлетамаҡ ҡалаһы хакимиәте башлығы Спартак Ғәли улы Әхмәтов, филармония директоры Әхмәр Кинйәабыҙ улы Әхмәҙуллин, филармонияның художество етәксеһе Римма Шәһит ҡыҙы Шакированың ярҙамы ифрат ҙур булды. Бейеү театры коллективы исеменән уларға ихлас күңелдән рәхмәт белдерәбеҙ.



*Беҙҙең ҙур, татыу ғаилә — Стәрлетамак бейеү театры*

Стәрлетамаҡ бейеү театры ойошторолоуға быйыл теүәл 15 йыл була. Уның барлыҡҡа килеүе, әлбиттә, иң тәүҙә күренекле хореограф Хәлил Ишбирҙин исеме менән бәйле. Нәҡ уның сағыу, оригиналь композициялары коллективтың йөҙөн, үҙенсәлекле башҡарыу стилен билдәләне, күп йылдарға етерлек дәрт, энергия биреп ҡуйҙы. Ҡыҙғаныска ҡаршы, театрҙың тәүге йылдарҙағы сығыштарының видеояҙмалары бик әҙ. Әммә беҙҙең көндәргә тиклем һаҡланған таҫмалар ҙа коллективтың тәүге составы нисек эшләгәнен баһалау мөмкинлеге бирә. Мәҫәлән, Рияз Исхаҡов төшөрөп алған ”Ямғыр аҫтында бейеү” композицияһы нигеҙендә ҙур бер тамаша, шоу эшләрлек идея, энергия ята. Мин уны Джин Келлиҙың ”Поющие под дождем” мюзиклындағы бейеү каскадтары менән сағыштырам да, Хәлил Ишбирҙиндыҡы көслөрәктер, тим. Ғөмүмән, театрҙың күп композициялары нигеҙендә ҙур шоу-тамашалар эшләрлек. Шулай итеп, коллектив тәүге көндән алып бейеү театры исемен аҡлап килә.

Бөгөнгө көндә ижади коллективта 20 бейеүсе эшләй. Улар бөтәһе лә балет артисы статусына эйә. Тимәк, һәр береһенән академик кимәлдәге әҙерлек талап ителә. Артистарҙың физик, гимнастик һәм махсус әҙерлек кимәле тәүге ҡараштан уҡ күҙгә ташланып тора. Күптәре коллектив ойошҡан көндәрҙән башлап эшләй. Мәҫәлән, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Руслан Сөләймәнов 1991 йылдан алып бейей. Мәскәү дәүләт мәҙәниәт һәм сәнғәт университетын тамамлаған, Волга буйы хәрби округының Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ орденлы йыр һәм бейеү ансамблендә хеҙмәт иткән. Театрҙан тыш, ул ”Сарби” сыуаш эстрада-фольклор ансамблендә сығыш яһай. Руслан Сәлмән улы театрҙа баш балетмейстер ассистенты, ир-егет бейеүселәр составы репетиторы вазифаһын башҡара.

Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Рәил Лоҡманов театрҙа 1993 йылдан алып эшләй. Ир-егет бейеүселәр составы репетиторы. Бер үк ваҡытта Стәрлетамаҡ медицина училищеһында, Республика башҡорт гимназия-

интернатында, 2-се һанлы башҡорт лицей-интернатында бейеү студияларына етәкселек итә. 2001 йылда Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты һорауы буйынса Новосибирск ҡалаһына башҡорт милли хореография композициялары ҡуйыу өсөн ебәрелә, улар һабантуйҙарҙа, төрлө тамашаларҙа күрһәтелә. Баймаҡ, Ҡырмыҫҡалы райондарында ла композициялар әҙерләүгә етәкселек итә. Рәил Рәйес улы талантлы педагог-хореограф булараҡ та киң танылыу яулап өлгөргән.

Айҙар Рафиҡ улы Ишбулатов та Башҡортостандың атҡаҙанған артисы, коллективта 1994 йылдан алып эшләй. Һоҡланғыс физик, гимнастик һәм махсус әҙерлеге, ҡатмарлы трюк элементтары башҡарыуы менән айырылып тора, шуның менән труппа сығыштарына көслө темперамент өҫтәй, көсөргәнешле темп бирә.

Линар Илдар улы Вәлиев театрҙа 1992 йылдан алып бейей. Волга буйы хәрби округы ансамблендә хеҙмәт итә. Ҙур тәжрибәһен бик теләп йәштәргә тапшыра.

Баш балетмейстер ассистенты, ҡатын-ҡыҙҙар составы репетиторы Эльвира Дауытова 1994 йылдан алып эшләй. Силәбе дәүләт мәҙәниәт һәм сәнғәт академияһында уҡыған. Театрҙа эшләүҙән тыш, ”Солнышко” балалар хореография ансамблендә кескәйҙәрҙе бейеү оҫталығына өйрәтә. Әлеге көндә Эльвира Марат ҡыҙы беҙҙең яңы музыкаль-хореографик шоу-тамашаны әҙерләү менән дә шөғөлләнә. Тамашала ул төп героиня ролен башҡарасаҡ.

Резеда Вәкил ҡыҙы Биктимерова беҙгә Бишбүләк районы мәҙәниәт йортонан килде. Татар бейеүҙәрен оҫта башҡарыуы менән айырылып тора.

Әлфиә Мөнир ҡыҙы Ғәзизова беҙҙең иң сағыу һылыуҙарыбыҙҙың береһе, яңы хореографик композицияларҙың оло биҙәге.

Дамира Амангилдина театрға Әбйәлил районы Хәлил ауылы мәҙәниәт йортонан килде. Дамира Зәйнетдин ҡыҙы ”Ашҡаҙар” эстрада төркөмөндә, ”Сарби” ансамблендә лә уңышлы сығыш яһай.

Һамар дәүләт мәҙәниәт һәм сәнғәт академияһын тамамлаған Рөстәм Рамаҙан улы Хәйруллин шул ҡалалағы ”Волжские казаки” дәүләт йыр һәм бейеү ансамблендә, Израилдә төрлө шоу төркөмдәрендә эшләп өлгөрә. Бейеүҙә яңы формаларға, ҡатмарлы элементтар, трюктар үҙләштереүгә ынтылыусан. Ғөмүмән, был сифат коллективтағы барлыҡ 20 артисҡа ла хас. Мин әле исемдәрен атап үтмәгән егеттәр һәм ҡыҙҙарҙың да һәр береһе театрҙа, беҙҙең композицияларҙа, яңы шоу-тамаша проекттарында үҙ урынын табып килә — улар барыһы ла киләсәктә үҙҙәрен Өфө, республика тамашасыһына танытыр тип ышанам. Бындай өмөттәргә ныҡлы нигеҙ бар.

Минән йыш ҡына: ”Ниңә һеҙҙең коллектив бейеү театры тип атала? Башҡа бейеүселәрҙән нимәһе менән айырыла?” — тип һорайҙар. Беҙ үҙебеҙҙе ғорурланып, Стәрлетамаҡ бейеү театры тип таныта алабыҙ. Мин үҙем, белеүегеҙсә, Фәйзи Ғәскәров исемендәге бейеү ансамблендә күп йылдар эшләнем. Ул — академик кимәлдәге коллектив. Ансамблдең төп эш формалары, принциптары башҡорт профес-